■ Әхлаҡ



# ШӨКӨР ИТӘ БЕЛЕГЕҘ!

Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьән Кәримдә әйтә: ”Шөкөр итегеҙ, шөкөр итһәгеҙ, арттырып бирермен, көфөрлөк ҡылмағыҙ, ул саҡта көфөрлөк ҡылыусылар өсөн Минең ғазабым бик ҡаты”.

Мосолман кешеһе һәр ваҡыт булағанына риза булып, ҡәнәғәтлелек хисе кисереп, шөкөр итергә тейеш. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд, ғәләйһис-сәләм, әйтә:

”Бәлә-ҡаза килгәндә сабыр итеүсе, ниғмәткә ирешкәндә шөкөрана ҡылыусы, үҙенә золом килгәндә ғәфү итә алыусы, ә инде үҙе золом ҡылды иһә, ғәфү үтенә белеүсе - ошо дүрт төрлө кеше генә имен һәм бәхетле”.

Әлеге хәҙистә дүрт төрлө мөһим мәсьәлә ҡуҙғатыла. Беренсеһе - бәлә-ҡаза килгәндә сабыр булыу. Тимәк, мосолман кешеһен сабырлыҡ сифаты биҙәп торорға тейеш. Бәхеттең нигеҙе - сабырлыҡ. Халҡыбыҙ борон-борондан ”Сабыр төбө - һары алтын”, тип әйтә килгән.

Был хәҙистең икенсе өлөшө шөкөр итеүгә ҡағылышлы. ”Кем дә кем ниғмәткә ирешкәндә шөкөр итһә, шул бәхетле булыр”, тип белгертә пәйғәмбәребеҙ.

Шөкөр итә белеү - ул кеше күңеленә тыныслыҡ өҫтәй, шөкөр итә белмәгән кешенең күңелендә иһә һәр ваҡыт бер төрлө ҡорт кимергән шикелле кемгәлер ҡарата көнсөллөк уты янып тора, уны бер ваҡытта ла етмәгәнлек тойғоһо ебәрмәй, ул уны эстән кимерә, йөрәген бөтөрә. Әкренләп был кеше үҙе лә тынысһыҙлана башлай. Сөнки ул шайтан ҡулында бик яҡшы ҡоралға әүерелә.

Был хәҙистең өсөнсө өлөшөндә золом тураһында фекер ҡуҙғатыла. Мөхәммәд, ғәләйһис-сәләм: ”Үҙенә золом итеүсене ғәфү итә белгән кеше бәхетле булыр”, ти. Ғәфү итә белеү сифаты күптәребеҙгә хас түгел, был ҡыҙғаныс. Мосолман кешеһе үҙендә был сифатты булдырырға тейеш. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд, ғәләйһис-сәләм, Ҡәҙер кисендә ҡылырға тейешле доғабыҙҙы Ғәйшә инәбеҙгә: ”Йә, Раббым, Һин ғәфү итеүҙе яратыусы һәм ғәфү итеүсе затһың, мине ғәфү итсе”, - тип өйрәтә. Аллаһы Тәғәләнең тәүбә ишектәре асыҡ, әҙәм балаһы гонаһтар ҡылған булһа ла, ихлас, ысын күңелдән Аллаһты танып, тәүбә итһә, гонаһтарын ҡабатламаһа, Аллаһы Тәғәләнең ризалығына өмөтләнә ала.

Шулай булғас, беҙ, әҙәм балаларына, бер-беребеҙҙе ғәфү итмәйенсә, үпкәләшеп, дошманлашып был өс көнлек донъяла күңелебеҙҙә үс һаҡлап, күңел тыныслығын йыуып йөрөү килешәме һуң? Әлбиттә, юҡ. Аллаһы Тәғәләгә ихласлап иман килтергән кеше Аллаһ ризалығына өмөт итеп ғәфү итә һәм шуның менән унын тәҡүәлегә тағы бер ҡат

һынала.

Бәхетле булыусыларҙың дүртенсе төркөмөнә ”үҙе золом ҡылып, шул золомдо танып, хатаһын аңлап, кешенән ғәфү үтенә белеүселәр” керә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был күренеш тә хәҙерге көндә һирәк күҙәтелә башланы. Мосолман кешеһе хата эшләһә, уны аңлап, танып, рәнйетелгән кешенән ғәфү үтенергә тейеш. Рәнйетелгән кешенән ситләшеү дөрөҫ түгел, тәкәбберләнмәйенсә унан ғәфү үтенеп, ризалығын алырға кәрәк, шул ваҡытта Аллаһ ризалығына ла өмөтләнә алабыҙ.

Ғалимдар әйтеүенсә, шөкөр итеү өс өлөштән тора. Беренсеһе - аҡыл менән, ысын күңелдән шөкөр итеү. Икенсеһе - тел менән, һүҙ менән шөкөр итеү. Өсөнсөһө - ғәмәл менән шөкөр итеү.

**Башҡортса дини календарҙән алынды.**

### Хәҙис шәрифтәр

* Мәсеттәрҙе күп итеп һалығыҙ, ҡалаларығыҙҙы маҡтанырлыҡ итеп төҙөгөҙ.

* Көслөләрҙән дә көслө һеҙҙең арала кем, күрһәтәйемме? Асыуы килгәндә үҙен тыйып ҡала алыусы.

*Ҡайҙа ғына булһаң да, намаҙҙыңды ваҡытында ҡыл!*

# ТЫРЫШЛЫҠ

Мосолманлыҡ - тырышлыҡ динелер. Динебеҙҙең әһәмиәтле мәсьәләләрен береһе - тырышлыҡ һәм тырышыуҙыр. Аллаһы Тәғәлә тырышыуҙы ла ғибәҙәттәрҙең береһе итеп һанаған һәм фарыз ҡылған. Хаҡ Ҡөрьәндә шулай бойорған:

***”Аллаһтың һиңә биргәне менән Әхирәт бәхетен эҙлә. Донъянан да өлөшөңдө онотма...”*** (”Әл-Ҡасс” (Хи-кәйә) сүрәһе, 77-се аят).

Донъя тормошо өсөн тырышмаған милләттәр ярлы булып ҡалырҙар, башҡа милләттәргә мохтаж булырҙар, көстәрен, ҡеүәттәрен юғалтып, башҡа милләттәрҙең ҡул аҫтына төшөрҙәр. Былай милләттәр ул ваҡытта Аллаһҡа ҡаршы ғибәҙәт тә ҡыла алмаҫтар, мәҙәниәт һәм мәғриәфттән айырылырҙар, наҙан булып ҡалырҙар. Был милләттәрҙең диндәре, имандары зәғифләнер, донъя ҡайғыһынан диндәрен ҡайғыртырлыҡ хәлдәре ҡалмаҫ, улар тормошта ауыр хәлдәргә төшөрҙәр.

Донъяға артыҡ бирелеп, Әхирәтен онотҡан кешеләрҙең хәлдәре лә шуға оҡшар. Дин, иман зәғифләнер, мәсеттәрҙә намаҙ уҡыусылар әҙәйер, кешеләр араһында мөхәббәт бөтөр, кешеләрҙең дәрәжәһе аҡса менән генә үлсәнер. Тәкәбберлек артыр, дуҫлыҡ һәм ҡәрҙәшлек әҙәйер. Был хәлдәрҙең икеһе лә аяныстыр. Шуның өсөн мосолман донъя тормошон да дөрөҫ итеп алып барырға. Әхирәтте лә онотмаҫҡа тейеш.

Пәйғәмбәребеҙ (с.а.с.) бер хәҙисендә былай тигән: ***”Ысын мосолман Әхирәттән дә, донъянан да ваз кисмәҫ. Донъяһын ҡалдырып, бары тик Әхирәте өсөн тырышыусы хәйерле, яҡшы мосолман түгел. Әхирәтен ҡалдырып, бары тик донъяһы өсөн тырышыусы ла - хәйерле мосолман түгел. Кешенең хәйерлеһе, яҡшыһы - донъяһы өсөн Әхирәтен ҡалдырмаҫ, Әхирәте өсөн донъяһын калдырмаҫ. Икеһен дә бергә алып барыр һәм башҡаларға ауырлыҡ һалмаҫ”***. Тимәк, ысын мосолман - донъя һәм Әхирәт эштәрен тигеҙ алып барыусы. Башҡа бер хәҙисендә лә пәйғәмбәребеҙ шулай бойора: ***”Донъя өсөн һис үлмәҫ кеүек тырыш, Әхирәт өсөн иртәгә үләсәк кеүек тырыш”***.

Аллаһы Тәғәлә донъяны ла, Әхирәтте лә иманлы ҡолдары өсөн бар иткән.

Донъяла ла, Әхирәттә лә бәхетле йәшәү - мосолмандың хаҡылыр. Ҡайһы бер мосолмандар донъя - кафырҙыҡы, Әхирәт мосолмандыҡы, тип ышандырырға тырышалар. Йәғни, мосолмандарға донъяла, Әхирәттә кафырҙарға рәхәт юҡ, тимәксе булалар. Йәиһә, донъяла - кафыр, мосолман - Әхирәттә бәхетле, тип һөйләйҙәр. Аллаһы Тәғәлә был донъяны үҙенә ышанған ҡолдары өсөн бар иткән. Мосолман был ике йыһанда ла бәхетле булырға тейеш.

Пәйғәмбәребеҙҙең (с.а.с.) иң күп ҡылған доғаларынан береһе ”Раббәнә әтинә” доғаһылыр. Бының мәғәнәһе: **”Эй, Раббыбыҙ, беҙгә донъяла ла, Әхирәттә лә, яҡшылыҡ һәм гүзәллекбир. Беҙҙе йәһәннәм утынан һаҡла”.** Тимәк, пәйғәмбәребеҙбыл доғала Аллаһтан донъя тормошо өсөн ҡайғы һәм ғазап һорамаған, киреһенсә, яҡшылыҡ һәм гүзәллек һораған.

Донъяла бәхетле булыр өсөн, Әхирәтте онотмайынса, тырышлыҡ менән йәшәргә кәрәк. Сөнки донъя тормошо фаниҙыр, ул бик тиҙ үтеп китәсәк. Әхирәт тормошо ғына мәңгелер.

Пәйғәмбәребеҙ (с.а.с.) бер хәҙисендә былай тигән: ***”Донъя Әхирәттең майҙанылыр. Ул майҙанға нәмә сәсһәң, Әхирәттәшуны ураһың”***. Бер Ислам ғалимның әйтеүенсә, донъялаикетөрлө кеше бар. Береһен донъя алдай, сөнки ул Аллаһты ла Әхирәтте лә онотҡан, донъя тормошо өсөн генә тырыша.Икенсеһе - донъяны алдай, сөнки ул дөъя өсөн дә, Әхирәт өсөн дә тырыша, был эштәрҙе бергә алып бара. Һеҙ икенселәрҙән булығыҙ. Донъя һеҙҙе алдамаһын, һеҙ донъяны алдағыҙ.

Пәйғәмбәребеҙ (с.а.с.) бер көндө иптәштәре менән ултырғанда, ҡулына ике ҡыҫҡа таяҡ алып, бер таяҡтарҙың береһен һораған: ***”Был хәрәкәттең мәғәнәһен беләһегеҙме?”*** Иптәштәре: ”Аллаһ һәм уның илсеһе белер”, - тип яуап биргәс, пәйғәмбәребеҙ, уның мәғәнәһен шулай асыҡлаған:

***”Был ҡыҫҡа таяҡтарҙың береһе - ғәмәл, береһе - әжәлдер. Алыҫҡа ташланған таяҡ кешенең ғәмәле, йәғни донъялағы теләктәрелер. Кеше һәр ваҡыт был теләктәрҙең артынан йүгерер, ләкин нисек тә етә алмаҫ. Эргәмә ҡуйылған таяҡ кешенең әжәлде абайламай, һиҙмәй ҡалалар. Кеше ғәмәленең артынан тормошо бөтөр. Донъя тормошо һеҙҙе алдамаһын, сөнки Аллаһ кешегә (муйын) тамырынан да яҡын”.*** Тимәк, үлем һәм Әхирәтте һаман иҫтә тоторға кәрәк. Бер көн киләсәк, беҙҙән ул көндө донъяла эшләгән бөтә эштәребеҙ һораласаҡ.

**Мөхәммәт ҒӘЛЛӘМ.**

